КУБОК ГАГАРИНА олимпиада школьников

2024-2025 учебный год
РЕСПУБЛИКАНСКИЙ ЭТАП

# БАШКИРСКИЙ ЯЗЫК 7 КЛАСС

Город, район, ОУ:

Фамилия, имя:

**Персональная итоговая таблица** (заполняется учителем – членом жюри республиканского этапа)

| Задания | 1 | 2 | 3 | 4 | 5 | 6 | 7 | 8 | 9 | 10 | Сумма |
|---|---|---|---|---|---|---|---|---|---|---|---|
| Количество баллов | | | | | | | | | | | |

Желаем успеха!

**1** **Ниндәй хәрефтәр һүҙ башында яҙылмай? Шул хәрефтәр менән миҫалдар килтерегеҙ.**

**2** **Рәүеш менән сифаттарҙың оҡшаш һәм айырмалы яҡтарын яҙығыҙ. Миҫал килтерегеҙ.**

**3** **Мәҡәлдәрҙең дауамын билдәләгеҙ.**

| | | А | Б | В | Г |
|---|---|---|---|---|---|
| 1 | *Аҡһаҡ булһа ла, ...* | ○ | ○ | ○ | ○ |
| 2 | *Андыҙ барҙа ...* | ○ | ○ | ○ | ○ |
| 3 | *Ҡолон аҫраһаң ...* | ○ | ○ | ○ | ○ |
| 4 | *Үгеҙҙе маҡта ...* | ○ | ○ | ○ | ○ |

А) *... атты ек.*
Б) *... ат менерһең*
В) *... ат үлмәҫ.*
Г) *... үҙ атың булһын.*

**4** **Ҡылымдың нисә һөйкәлеше бар?** *Уҡы* **ҡылымын ошо һөйкәлештәрҙә үҙгәртеп, һөйләмдәр уйлап яҙығыҙ.**

**5** **“Күңел күҙҙәре” хикәйәһенең авторы кем? Был авторҙың тағы ниндәй әҫәрҙәрен беләһегеҙ?**

______________________________________________

______________________________________________

______________________________________________

______________________________________________

**6** **Был геройҙар ниндәй әҫәрҙән?**

| | | А | Б | В | Г |
|---|---|---|---|---|---|
| 1 | *Рәхмәт, Әсҡәт* | ○ | ○ | ○ | ○ |
| 2 | *Иншар* | ○ | ○ | ○ | ○ |
| 3 | *Миҙхәт, Мотаһар* | ○ | ○ | ○ | ○ |
| 4 | *Нуриҙә әбей* | ○ | ○ | ○ | ○ |

А) *“Өйрәлмәк”*
Б) *“Атай икмәге”*
В) *“Тайғаҡ баҫма”*
Г) *“Һарыбай”*

**7** **Бирелгән һөйләмдәрҙән ярҙамсы һүҙҙәрҙе табып, төрөн билдәләгеҙ.**

1) *Мин дә киноға барам.*
2) *Ура, каникулдар башлана!*
3) *Болот таралды, әммә ҡояш сығырға ашыҡманы.*
4) *Уҡытыусы герой тураһында һөйләне.*

______________________________________________

______________________________________________

______________________________________________

______________________________________________

**8** **М. Кәримдең “Оҙон-оҙаҡ бала саҡ” повесында Әсғәттәрҙең урамын нисек атап йөрөтәләр?**

○ *Кендек*
○ *Әтәс*
○ *Һары серекәй*
○ *Туң мөрйә*

**9** **Бирелгән әҫәрҙәрҙең жанрын билдәләгеҙ.**

1) *Б. Бикбай “Рус теле”* ______________________
2) *Ж. Кейекбаев “Туғандар һәм таныштар”* ______________________
3) *Ф. Аҡбулатова “Атай икмәге”* ______________________
4) *М. Кәрим “Оҙон-оҙаҡ бала саҡ”* ______________________

**10 Текст буйынса бирелгән эш төрҙәрен башҡарығыҙ.**

– *Әкәмәт был донъя. Берәүҙәрҙә гел генә күмәс, икмәк юҡ, икенселәрҙә икмәк бар, күмәс юҡ. Беҙҙә, әйтәйек, күмәс бары йома көндө генә була. – Әсғәт минең ҡулдағы икмәк киҫәгенә йотолоп ҡараны ла, ирендәрен ялап, ауыҙын сапылдатып ҡуйҙы.*

– *Мә, аша, – тип һыныҡты уға тотторҙом. Киҫәкте ул һаҡ ҡына уртаға һындырып яртыһын миңә һондо. Мин баш сайҡаным.*

– *Икмәктән туйған әҙәм булыр икән, – тип, арыҡ боттарын һуҙып, үлән өҫтөнә ултырҙы. Күлдәк итәген теҙ баштарына япты ла ашыҡмай ғына ашарға кереште. Итәгенә төшкән валсыҡтарҙы шунда уҡ алып ҡаба барҙы.*

1) Өҙөк ниндәй әҫәрҙән алынған? Уның авторы кем?

______________________________

2) Һуңғы абзацтан сифат, хәл, уртаҡ ҡылымдарҙы табып, төркөмсәләрен билдәләп яҙығыҙ. ______________________________

______________________________

______________________________

3) Беренсе абзацтан алмаштарҙы табып, төркөмсәһен билдәләп яҙығыҙ.

______________________________

______________________________

4) “Ҡулдағы” һүҙендә ниндәй ялғауҙар бар? Ялғауҙың төрөн яҙығыҙ.

______________________________

______________________________

5) “Ауыҙын” һүҙендә нисә тартынҡы һәм һуҙынҡы өн бар?

______________________________

______________________________

6) Өҙөк алынған әҫәрҙең төп идеяһын билдәләгеҙ.

______________________________

______________________________

______________________________

______________________________

______________________________

______________________________

______________________________

______________________________

**Работу выполнил участник:** ______________________________

Фамилия и имя участника *(заполняется участником собственноручно, разборчиво, прописью)*